# «КИЛЕП ДАН ИТТЕГЕҘ!..»



*27 февралдә Сафакүл ауылында Ҡурған өлкәһе башҡорттары королтайы үҙғарылды. Уның эшендә Башҡортостан Республикаһының Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Х.Х. Ишморатов, Бөтә донъя башҡорттары королтайы Башҡарма комитеты рәйесе Н.А. Мәжитов, «Ватандаш» журналы, «Башҡортостан» һәм «Йәшлек» гәзиттәре, «Башҡортостан» телерадиокомпанияһы журналистары, Стәрлетамаҡ районы хакимиәте вәкилдәре ҡатнашты. Ҙур делегация составында шулай уҡ «Ҡаруанһарай» ансамбле, Стәрлетамаҡ бейеү театры артистары, ғалимдар, яҙыусылар, «Китап» нәшриәте, Матбуғат һәм киң информация министрлығы хеҙмәткәрҙәре булды.*

*Унан алдараҡ Ҡурғанда, Әлмәндә, Сафакүлдә һәм Щучье ҡалаһында бәләкәй королтайҙар үткәрелә, өлкә королтайына делегаттар һайлана. Уларҙы үткәреүҙә, Ҡурған өлкәһе башҡорттарының II королтайына әҙерлектә Бөтә донъя башҡорттары королтайы Башҡарма комитеты ҙур ярҙам күрһәтә.*

Ҡурған өлкәһендә 18 меңдән ашыу башҡорт йәшәй, күпселеге Сафакүл (8 мең кеше) һәм Әлмән (6 мең кеше) райондарында. Ҡатай, әйле, һарт ырыуҙарына ҡарайҙар. Улар заманында Ырымбур губернаһы Силәбе өйәҙенең дүрт волосы составында Ялан кантонын тәшкил итә. 1919 йылда кантон Башҡортостан Республикаһының Ялан кантоны тип иғлан ителә һәм 1922 йылдың сентябренә тиклем Башҡортостан составында ҡала. Артабан Силәбе округына тапшырыла һәм Ялан, аҙаҡ Ялан-Ҡатай районы булып йөрөй, район үҙәге Сафакүлдә урынлаша. 1940 йылда Ялан-Ҡатай районы ике яңы районға — Сафакүл һәм Әлмән райондарына бүленә. 1943 йылдың 6 февралендә улар яңы ойошторолған Ҡурған өлкәһенә тапшырыла.

Сафакүл һәм Әлмән райондары 1922 йылда уҡ Башҡортостандан айырылһа ла, 1962 йылға тиклем Өфө менән даими, ныҡлы бәйләнеш тота. Иң тәүҙә — халыҡ мәғарифы һәм мәҙәниәт өлкәһендә. Балалар тулыһынса башҡорт мәктәптәрендә генә белем ала. Дәреслектәр, программалар, методик ҡулланмалар, кадрҙар менән Башҡортостан тәьмин итеп тора. 1962 йылда райондар (тимәк, район халыҡ мәғарифы һәм мәҙәниәт бүлектәре лә) ликвидациялана, улар урынына Щучье территориаль-етештереү идара-



05.2002 Part 1.p65 49 06.06.02, 17:12

лығы (Щучанское территориально-производственное управление — ТПУ) ойоштоpола. Төбәктәге башҡорт мәктәптәре бөтөрөлә, уҡытыу тулыһынса рус теленә күсерелә. ТПУ бойороғо буйынса, мәктәптәрҙәге, китапханаларҙағы дәреслектәр, башҡорт телендәге барлыҡ китаптар конфискацияланa һәм урынында юҡ ителә — яндырыла. Төбәктәге ысын милли этноцид — милли мәғариф һәм мәҙәниәт системаһын юҡҡа сығарыу мәхшәре өс йыл дауам итә. 1965 йылдың мартында «хата» төҙәтелә — Сафакүл һәм Әлмән районлары рәсми рәүештә тергеҙелә һымаҡ, әммә был күҙ буяу ғына була. Юҡҡа сығарылған милли мәҙәниәт һәм мәғариф системаһы яңынан аяҡҡа баҫа алмай. Мәктәптәрҙә уҡытыу урыҫса ғына алып барыла. Сафакүлдәге һәм Әлмәндәге бөтә архивтар, ҡиммәтле документтар юҡ ителә.

Әүәл был яҡтар заманына күрә бик мәҙәниәтле, алдынғы төбәк була. Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыуҙа ҡатнашыусыларҙың береһе Шәриф Манатовтың исемен беҙҙә бөтәһе лә беләләр. Ә бына революцияға тиклем үк китаптар сығарып өлгөргән, Пушкин, Лермонтов әҫәрҙәрен, ғәрәп, фарсы, төрөк телдәренән башҡортсаға шиғырҙар тәржемә иткән Ямалетдин Йомаевтың (1892 йылда Әлмәндә тыуған) исеме иһә әлегә бик аҙҙарға ғына таныш. Риза Фәхретдин үҙенең «Аҫар» тигән күп томлы тарихи-библиографик китабында Әлмән ауылында йәшәгән Ғәбделнасир исемле бик уҡымышлы кешене иҫкә ала. Был шәхес (вафаты — 1841 йылда) 95 йәше тулғанға тиклем төрлө боронғо китаптарҙы эҙләп табып, уларҙы ҡулдан күсереп яҙыу менән шөғөлләнә һәм ошо рәүешле тупланған китапханаһындағы китаптар һаны 223 томға еткерә.

Төбәк үҙенсәлекле музыкаль культураға эйә. Башҡортостандағы ҡурайсыларға коллегалары Әхмәтйән Тимербаевтың исеме күптән таныш. Был яҡтарҙа скрипкала оҫта уйнаусылар ҙа бар. Мәҫәлән, Заһиҙулла Хәмитов менән Мәсәлим Хәмзин олатайҙарҙа уникаль ҡоралдар — 1716 йылда уҡ эшләнгән Антонио Страдивари скрипкалары булғаны билдәле. Бына ниндәй тамырҙарға таянып йәшәй Ҡурған башҡорттары. Халыҡтың күңелендә һаҡланғанды, ҡанына һеңгәнде уятырға, ҡуҙғатырға ғына кәрәк. Ошо эштә улар Башҡортостандың ярҙамына мохтаж. Һәм беҙ уларҙы ҡулдан килгәнсә рухи, әхлаҡи ярҙамыбыҙҙан айырмаҫҡа бурыслыбыҙ. Республиканан вәкилдәр төбәккә ҡыҫҡа ғына ваҡытҡа килһә лә, урындағы отҡор халыҡ мөмкин тиклем күберәк күрергә, ишетергә, өйрәнеп ҡалырға тырыша. Һәм, рухланып: «Килеп дан иттегеҙ әле!..» — тип ҡала.

Ҡурған яҡтарына милли уяныу, яңырыу елдәре һуңлабыраҡ килеп етә. 1995 йылдың ғинуар-февраль айҙарында Сафакүлдә һәм Әлмәндә Башҡорт халыҡ йыйындары үтә. Апрелдә Ҡурған радиоһында Ғиниәт Уйылданов ойошторған «Тыуған яҡ» тапшырыуы эфирға даими сыға башлай. Июнь айында өлкә делегацияһы Беренсе Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы эшендә ҡатнаша, июлдә Әлмән районы һәм Башҡортостан Республикаһының Хәйбулла районы араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлә. 1996 йылдың февралендә Башҡортостандың хөкүмәт делегацияһы Ҡурған өлкәһенә килә, ошо уҡ айҙа Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайының өлкә бүлексәһе ойоштоpола. 1997 йылда өлкәгә рәсми визит менән Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары Х.Х. Ишморатов килә, 1998 йылдың 13 мартында Ҡурған өлкәһе делегацияһы рәсми визит менән Өфөлә була. 1999 йылдың апрелендә Ҡурған ҡалаһында «Ҡурай» башҡорт йәмғиәте булдырыла, ул оҙаҡламай шул уҡ исемдә йөрөткән гәзит сығара башлай. 2000 йылдың ноябрендә Сафакүлдә «Замандаш» гәзитенең тәүге һаны сыға. Ә үткән йылда Башҡортостан ғалимдары менән берлектә «Башки-

ры Курганской области» китабы нәшер итеүгә әҙерләнгән...

Һанай китһәң, ҡыҫҡа ғына осорҙа байтаҡ эш эшләнгән. Был эш бушҡа булмаҫ: «зәңгәр күлдәр иле» тип матурлап әйтелгән Сафакүл, Әлмән яҡтары уяна, күҙҙәрен аса, аяғына баҫырға йыйына. Шуны күреп, шуға инанып ҡайттыҡ был ҡоролтайҙан.

Һеҙҙең иғтибарға ҡоролтайҙа яңғыраған сығыштарҙың бер өлөшөн тәҡдим итәбеҙ. Унда әйтелгән тәҡдимдәр II Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына әҙерлек мәлендә файҙалы булыр тип уйлайбыҙ.

**Ҡурған өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Марс Закир улы ВӘЛИЕВ:**

— Хөрмәтле туғандар! Хөрмәтле ҡоролтай делегаттары һәм ҡунаҡтары! Ҡурған өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы — бөгөнгө ошо ҙур форум Башҡортостан Республикаһы һәм өлкә араһында төҙөлгән килешеүгә, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, губернатор Олег Алексеевич Богомолов, ҡалалар һәм районлар хакимиәттәре башлыҡтары ярҙамына таянып үткәрелә. Һүҙемде ҡоролтайға әҙерлектә ҡатнашҡандарҙың барыһына ла ҙур рәхмәттәр белдереүҙән башларға теләр инем.

Өлкәлә йәшәгән 18 мең башҡорттоң теләктәрен иҫәпкә алып, Олег Алексеевич Богомолов, урындағы хакимиәт башлыҡтарының ҡоролтайҙар үткәреүҙә ярҙам күрһәтеүҙәрен һорап, ҡарар ҡабул итте. Сафакүл районында 12, Әлмән районында 9 ауыл ҡоролтайы уҙғарылды. Әлмәндәге район ҡоролтайында Өфө ҡалаһының Дим районы делегацияһы ҡатнашты, улар менән хеҙмәттәшлек тураһында килешеү төҙөлдө. Башҡортостан ҡунаҡтары ҙур концерт ҡуйҙы, район мәктәптәренә һәм балалар баҡсаларына бүләктәр тапшырҙы.

Район ҡоролтайҙарында яҡындағы 2-3 йылға эш пландары билдәләнде. Ҡурған ҡалаһы башҡорттарының «Ҡурай» йәмғиәте, унын етәксеһе Мөсәлимов Фәнис Фаяз улы ҙур эш башҡарҙы. Яңыраҡ Щучан районында ла ҡоролтай булдырылды. Беҙҙең өлкә ҡоролтайының төп эш девизы ошо: «Иң мөһиме — туған телде һаҡлау». Тел булһа, халыҡ һаҡланыр, ил һаҡланыр. Был йүнәлештә Сафакүл районында уңышлыраҡ эшләйҙәр.

Эштең нигеҙе — башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытылған мәктәптәр селтәрен үҫтереү. Әле районлағы 10 мәктәптә башҡорт теле предмет буларак уҡытыла, балаларҙың 45 проценты туған телде өйрәнә. Быйыл телде уҡытыу Бикбирҙе, Белово, Сибиряк мәктәптәрендә тергеҙелде, Ялан, Субботино, Надеждино мәктәптәрендә лә яҡын киләсәктә мәсьәлә хәл ителергә тейеш.

1995 йылға тиклем беҙ башҡорт теленән дәреслектәргә, методик белешмәләргә, һүҙлектәргә, нәфис әҙәбиәткә бик ҙур ҡытлыҡ кисерҙек. Башҡортостан ошо йәһәттән ҙур ярҙам күрһәтә башлағас, хәл еңеләйә төштө. Артабан өлкә мәктәптәрен уҡыу әсбаптары менән тәьмин итеү эше план һәм бюджет нигеҙендә алып барылырға, уҡыусылар һаны артыуы иҫәпкә алынырға тейеш.

Милли кадрҙар мәсьәләһен хәл итеү Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығы, Силәбе дәүләт университеты менән тура бәйләнештәр нигеҙендә алып барыла. Төп эш йүнәлеше — башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса үҙ белгестәребеҙҙе әҙерләү. Балалар Өфөләге гимназияларға ебәрелә, аҙаҡ юғары белем ала. Мәҫәлән, 1-се һанлы башҡорт гимназияһында 13 бала уҡып сыҡты, бөтәһе 22 уҡыусы Өфөлә урта белем алды. Дөйөм алғанда, һуңғы йылдарҙа 70-тән ашыу уҡыусы Башҡортостанға ебәрелде. Тәүге белгестәр районда эшләй ҙә башланы, әммә Өфөлә белем алғандарҙың күбеһе унда тороп ҡала. Тимәк, улар өсөн тейешле шарттар булдырыу кәрәк.

Йәнә бер мөһим эш йүнәлеше — башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының квалификацияһын



05.2002 Part 1.p65 51 06.06.02, 17:12

күтәреү. Финанс ҡыйынлыҡтары арҡаһында уҡытыусыларҙы Өфөгә ебәреү мөмкинлеге булмағас, Башҡортостан белгестәре үҙҙәре Ҡурғанға килеп курс ойоштorҙо һәм 16 уҡытыусы унда икенсе специальность — башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы дипломы алды. Бынан тыш, ул белгестәр Аҙналы, Баҡай, Абултай, Сөләймән, Солтан мәктәптәрендә булып, уҡытыу методикаһын көйләүҙә ҙур ярҙам күрһәтте. 2000 йылдың майында Өфө ғалимдары, белгестәре ҡатнашлығында «Башҡорт телен һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙың заманса методикаһы» тип аталған фәнни-ғәмәли конференция ойоштороолдо.

Әлмән районы әлегә белгестәр әҙерләү буйынса эште һүлпән алып бара — уларҙан 9 кеше генә Башҡортостанда юғары белем ала. Башҡорт теле 6 мәктәптә генә уҡытыла, балаларҙың 40 проценты ғына үҙ телен өйрәнә. Район халыҡ мәғарифы бүлеге мөдире Ринат Ришат улы Кәримовтың раҫлауынса, уларҙың потенциалы күпкә ҙурыраҡ.

Щучан районында башҡорттар 5 ауылда йәшәй, әлегә унда башҡорт теле бер мәктәптә лә уҡытылмай. Район ҡоролтайында Башҡарма комитет рәйесе итеп Сухоборское ауылы мәктәбе директоры Фәриҙә Шарап ҡыҙы Ниғәмәтова һайланды. Ул үҙ эшмәкәрлегенең төп йүнәлеше тип тел проблемаларын күрһәтә.

Аҙналы төп урта белем биреү мәктәбенә 1999 йылда башҡорт мәҙәниәте мәктәбе статусы бирелде. Мәктәп, балаларға белем биреүҙән тыш, бөтә ауыл өсөн мәҙәниәт һәм мәғрифәтселек үҙәге ролен үтәй. Авторы директор Рәмзиә Шәрифйән ҡыҙы Мусина булған модель уңышлы тип табылды.

Башҡортостан Республикаһы Мәғариф министрлығына, министр Ғәлиә Мөхтәр ҡыҙы Мөхәмәтйәноваға даими ярҙамдары өсөн рәхмәт әйтергә теләр инем. Башҡортостандың Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы ла төбәктә әүҙем эш башланы. Өфөнән килгән Рәнис Алтынбаев, Рәйес Низаметдинов, Миңлеғәфүр Зәйнетдиновтар милли музыка ҡоралдарын, башҡорт фольклор төркөмдәрен тергеҙеү йүнәлешендә байтаҡ эш башҡарҙы. Китапханалар 1000 дананан артығыраҡ китап алғас, Сафакүл районы китапханаларында уҡыусылар һаны арта башланы. Китапханасыларҙың Баймаҡта уҙғарылған семинарҙа ҡатнашыуы ла бик файҙалы булып ҡалды. Фәйзи Ғәскәров исемендәге бейеү ансамбленең килеп концерт ҡуйыуын халыҡ ысын байрам һымаҡ ҡабул итте. Әле беҙҙең фольклор төркөмдәре «Оҙон көй — 2002» йыр конкурсына әҙерләнә. Ҡурайҙар, ҡубыҙҙар, ноталар, методик әҙәбиәт, аудио- һәм видеокассеталар ҙа хәҙер етерлек. Әлегә белгестәргә генә ҡытлыҡ кисерәбеҙ.

Ҡурған өлкәһе башҡорттары исеменән академик Марат Талғат улы Аҙнабаевҡа, ул етәкләгән Өфө күҙ ауырыуҙары институты коллективына рәхмәттәребеҙҙе еткерергә теләр инек. Академик Аҙнабаевтың исемен белмәгән кеше юҡтыр беҙҙә, ул хәҙер Сафакүлдә һәм Әлмәндә иң популяр шәхестәрҙең береһе. Институт етәкселеге 1996 йылда Сафакүл районы хакимиәте менән килешеү төҙөнө, шунан һуң Өфө табиптары 2135 кешене ҡабул итте, 181 пациентҡа дауалау билдәләне, 98 ауырыуға операция яһаны. Офтальмология өлкәһендә диагностика, дауалау бик ҡиммәтле, әммә институт барлыҡ сығымдарҙы үҙ өҫтөнә алды. Академик Аҙнабаевтың, уның коллегаларының ошо ҙур эшен ысын мәғәнәһендә профессиональ ҡаһарманлыҡ өлгөһө тип баһалайбыҙ.

Башҡортостандың Матбуғат һәм киң информация министрлығы ла беҙгә һуңғы йылдарҙа ифрат ҙур ярҙам күрһәтте. Уларҙан компьютерлаштырылған редакция комплексы, башҡорт телендәге текстар йыйыу, версткалау программалары алдыҡ. Президент Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов ярҙамы менән 240 мең һумлыҡ ризограф һатып алдыҡ һәм



05.2002 Part 1.p65 52 06.06.02, 17:12

башҡорт телендә «Замандаш» гәзитен сығара башланыҡ. Әлбиттә, уны даими сығарыу мәсьәләһе аҙағына тиклем хәл ителмәгән, әммә был эшкә нигеҙ һалынған.

Сафакүл һәм Әлмән халҡы ҡоролтайҙарҙа даими рәүештә башҡорт телендәге радио һәм телевидение тапшырыуҙары мәсьәләләрен күтәреп килә. Радиола кварталға бер тапҡыр 20 минутлыҡ «Тыуған яҡ» тапшырыуы эфирға сыға — был ғына аҙ. Китапханаларға Башҡортостанда сыҡҡан журналдарҙы яҙҙырып алыу ҙа хәл ителмәгән. «Йәшлек» гәзите Ҡурған өлкәһе өсөн китап йыйыу акцияһы ойошторғас, беҙҙең йәштәрҙә лә башҡорт әҙәбиәтенә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уяна башланы. Әммә Щучан районында һәм Ҡурған ҡалаһында башҡорт китаптарына әүәлгесә ҙур ҡытлыҡ.

Беҙҙең ҡоролтай эшендә ветерандар ҙа ҙур роль уйнай. Йәштәрҙән айырмалы, улар — заманында башҡорт мәктәптәрендә уҡып, башҡорт рухын һеңдереп үҫкән быуын. Аҡһаҡалдарға ошо теләктәр менән мөрәжәғәт итәм: йәштәр өсөн милләтте тергеҙеүҙә өлгө булырға тырышығыҙ, ғаиләләрегеҙҙә башҡортса ғына һөйләшеүҙе ҡәтғи талап итегеҙ, Башҡортостанда сыҡҡан журнал, китап, гәзиттәрҙе йәштәргә еткерегеҙ. Боронғо риүәйәттәрҙе, йырҙарҙы, башҡа милли ҡомартҡыларҙы һаҡлағыҙ. Ошо йәһәттән әлмәндәрҙә бер ни тиклем тәжрибә тупланған, уларҙа Аҡһаҡалдар советы әүҙем эшләй.

2000 йылда өлкә хакимиәте 2000-2002 йылдарға иҫәпләнгән «Урал аръяғы халыҡтарының милли мәҙәниәтен үҫтереү программаһы» ҡабул иткәйне. Ул программаны төҙөүҙә беҙҙең ҡоролтай ҙа ҡатнашты. Беҙ ике тиҫтәгә яҡын тәҡдим индерҙек һәм улар барыһы ла документта сағылыш тапты. Программа башҡорт телен һәм мәҙәниәтен тергеҙеү өсөн ныҡлы нигеҙ булып тора. Финанс ҡыйынлыҡтары сәбәпле, ҡайһы бер пункттар үтәлмәне. Мәҫәлән, Сафакүлдә һәм Әлмәндә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттарын йыһазландырыуға аҡса бүленмәне — был эш Башҡортостандан килгән финанс ярҙамы иҫәбенә эшләнде. Китапханалар һәм музейҙар эшмәкәрлеген финанслау ҙа тотҡарлана. Программала бер бик яҡшы пункт бар: өлкә вуздарында Әлмәндән һәм Сафакүлдән сыҡҡан абитуриенттар өсөн ҙур квота ҡаралған — шуны тулыраҡ файҙаланырға кәрәк. Ҡурған юғары уҡыу йорттары, беҙҙәге мәктәптәрҙә хатта төп предметтарҙы уҡытыусы кадрҙар етешмәүен иҫәпкә алып, ошо юлды тәҡдим итә.

Силәбе өлкәһендә ҡайһы бер мәктәптәрҙә милли тел һәм мәҙәниәт буйынса директор урынбаҫары вазифаһы һәм штат берәмеге булдырылған. Беҙҙә әлегә хатта методистар ҙа юҡ. 2003-2007 йылға иҫәпләнгән яңы программаға тәҡдимдәребеҙҙе индереп, төп баҫымды финанс мәсьәләһенә яһарға кәрәк. Ҡоролтайҙың үҙенең эшмәкәрлеген финанслау мәсьәләһе лә 1996 йылдан бирле хәл ителмәй килә. Офис, рәйескә штат берәмеге кәрәк. Башҡортостан алыҫ булғас, транспорт сығымдары ла бик ҙур. Өфөгә йыш йөрөп булмай, сөнки бензинды ла үҙебеҙҙең йә администрация аҡсаһына алырға тура килә. Ә йөрөмәһәң, эш эшләнмәй.

Беҙ Башҡортостандың Силәбеләге вәкиллеге, уның етәксеһе Мөхәмәтулла Исмәғил улы Хафизов менән хеҙмәттәшлеккә ҙур өмөттәр бағлайбыҙ. Ул вәкиллек Силәбе, Свердловск, Төмән һәм Ҡурған өлкәләре менән бәйләнеш өсөн яуаплы. Беҙҙең төбәк менән хеҙмәттәшлектә гуманитар өлкәгә һәм ауыл хужалығын тергеҙеүгә төп иғтибар бирелергә тейеш.

Башҡортостан ғалимдарына ла өмөттәребеҙ бик ҙур. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты тырышлығы менән оҙаҡламай «Башкиры Курганской области» тигән китап сығасаҡ. Губернатор Олег Алексеевич Богомолов ярҙамы менән «Страницы истории Сафакулевского райо-



05.2002 Part 1.p65 53 06.06.02, 17:12

на» китабын сығарыуға өлгәштек. Яңыраҡ Баҡай ауылы тарихына арналған китап сыҡты. Был өлкәлә лә күҙгә күренерлек эш башҡарылһа ла, Башҡортостан ғалимдары, яҙыусылары беҙҙең төбәккә күберәк иғтибар бирһен ине. Республика юғары уҡыу йорттары беҙҙең Ҡурған абитуриенттары өсөн бүленгән квоталарҙы тейешле күҙәтеүгә алһын ине.

Мин үҙем теүәл алты йыл ҡоролтай Башҡарма комитетын етәкләнем. Ошо йылдар дауамында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Абдулхаҡ улы Мәжитов беҙҙең төбәккә даими рәүештә ҙур ярҙам күрһәтеп килде.

Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов, Премьер-министр урынбаҫары Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов, республиканың башҡа етәкселәре, милли интеллигенция вәкилдәренең ярҙамы баһалап бөткөһөҙ ҙур.

1995 йылда беҙҙең ул саҡтағы район хакимиәте башлығы Илгиз Ниғәмәт улы Йосопов ҡоролтай хәрәкәтен ойоштороусы булды, уға күп яҡташтарыбыҙ ярҙам күрһәтте.

Хөрмәтле дуҫтар, өлкә башҡорттары исеменән барығыҙға ла ысын күңелдән ҙур рәхмәт белдерәһем килә!

**Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Нияз Абдулхаҡ улы МӘЖИТОВ:**

— Һүҙемде Ҡурған өлкәһе губернаторы Олег Алексеевич Богомоловҡа ҡоролтайға әҙерлек мәлендә күрһәткән ярҙамы өсөн ҙур рәхмәт белдереүҙән башларға теләр инем.

Ҡурған өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты эшмәкәрлегенә, урындағы ысынбарлыҡты, шарттарҙы иҫәпкә алып, киңерәк ҡарарға кәрәк. Улар, ғәмәлдә бөтә башҡорт ауылдарында булып, ҡоролтайҙар үткәреп, ҙур эш башҡарған.

Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы үҙ эшмәкәрлеген Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының хоҡуҡи нормалары сиктәрендә алып бара. Башҡортостан Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһындағы декларацияға ярашлы, республика ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙгә телде, мәҙәниәтте һаҡлап алып ҡалыуҙа, үҫтереүҙә ярҙам күрһәтергә бурыслы. Беҙ иҡтисади проблемалар менән аҙ шөғөлләнәбеҙ, әммә уларҙың мәҙәниәт, мәғариф үҫешен тотҡарлауын күрһәтеп үтмәү мөмкин түгел. Ауылдарҙа, хатта мәктәптәрҙә электр энергияһы биреүҙе сикләү хәлде ҡатмарлаштыра. Башҡорт ауылдарына газ үткәрелмәй, юл һалынмай, уларҙан йәштәр күпләп ситкә китә. Эш юҡ, хәл бик ауыр. Башҡорттарҙан етәкселәр, белгестәр, медиктар бик аҙ. Әлмән районында башҡорт телен уҡытыу әлегә насар ҡуйылған, шул уҡ ваҡытта унда ыңғай тәжрибә туплап өлгөргәндәр ҙә бар.

Тарихсы булараҡ, шуны ла әйтеп үтергә теләр инем. Өлкәлә нәшер ителгән тарихи әҙәбиәттә башҡорттар иҫкә алынмай һәм тарих рустар килеп төпләнгән мәлдән алып күрһәтелә. Башҡорттар бик боронғо замандан был төбәктең берҙән-бер төп халҡы булған — шуға иғтибар итергә кәрәк. Тарихты боҙоп күрһәтеүгә юл ҡуйырға ярамай.

Быйыл октябрь айында халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы уҙғарыла, уға әҙерлек рәүешендә башҡорттар йәшәгән бөтә төбәктәрҙә аңлатыу эше, конференциялар ойоштороу талап ителә. Тел ғаиләнән башлана.

1999 йылда Әлмәндә район ҡоролтайы уҙғарылды, Башҡарма комитет һайланды, әммә уның рәйесе эште тейешле кимәлдә ойоштора алманы әлегә. 2 февралдә Өфөлә үткәрелгән киңәйтелгән ултырышҡа ла район ҡоролтайы етәксеһе Иҙрис Рафаил улы Әбделвәлиев килмәне һәм иптәштәрен ебәрмәне. Әлмәндә талапсанлыҡты арттырып, эште йәнләндерергә кәрәк.



05.2002 Part 1.p65 54 06.06.02, 17:12

Дөйөм алғанда, ошо ете йыл эсендә өлкәлә ҙур эштәр эшләнде. Улар тураһында әйтелде. Шул эштәрҙә ҡатнашҡандарҙың барыһына ла Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты исеменән ҙур рәхмәт...

**Ҡурған өлкәһе губернаторы Олег Алексеевич БОГОМОЛОВ:**

— Халыҡтар әүәлдән үҙ булмышын, киләсәген ошолай йыйылып күҙаллай, тикшерә икән, етәкселәр



ҙә ул сараларҙан ситләшергә тейеш түгел. Мин бында күп ҡыҙыҡлы нәмәләр тураһында ишеттем.

Өлкәлә башҡорт халҡының абруйлы, эшлекле вәкилдәре күп. Губернатор булараҡ, мин башҡорттарҙың үҙ мәҙәниәтен тергеҙеүгә ынтылышын яҡлайым. Көстәрҙе берләштереп кенә уңышҡа өлгәшеү мөмкин, сөнки һеҙ асып күрһәткән проблемалар өлкәлә йәшәгән бөтә милләттәргә таныш. Тел мәсьәләһенә килгәндә, башҡорттар менән татарҙарҙа ла, рустарҙа ла үҙ телендә йүнләп уҡый-яҙа, әҙәмсә һөйләшә белмәгән тотош бер быуын үҫеп сыҡты. Телдәрендә — һүҙ аша һүгенеү. Был йүнәлештә хәл бик ауыр.

Ҡурған өлкәһендә милли сәйәсәт 2000 йылда ҡабул ителгән «Урал аръяғы халыҡтарының милли мәҙәниәтен үҫтереү программаһы» нигеҙендә алып барыла. Программаға өлкә башҡорттары ҡоролтайы тәҡдим иткән пункттар ҙа индерелгән. Уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн финанстар һәм ваҡыт кәрәк.

Мәҫәлән, радио һәм телевидение тапшырыуҙарын алайыҡ. Өлкә телерадиокомпанияһына Мәскәү каналдары ни бары 30 минутлыҡ ҡына эфир ваҡыты бүлә. Тимәк, спутник, кабель телевидениеһын үҫтерергә кәрәк. Башҡортостан спутник телевидениеһын үҫтерһә, беҙ Өфө тапшырыуҙарын ҡарай аласаҡбыҙ. Әле Шумиха ретрансляторында реконструкция эштәре башланды, шул маҡсатҡа 20 миллион һум бүленгән. Юлдар һалыуға килгәндә, бында хәл ауыр. 80-се йылдарҙың аҙағында беҙ йыл һайын 700 километр юл һалһаҡ, хәҙер 40 километрҙан арттыра алмайбыҙ. Асфальт, таш — бөтәһе лә ситтән килә.

Өлкәлә ислам дине көслө үҫеш алды. Әлеге көндә 42 мәсет эшләй, Ҡурғанда ҙур, заманса мәсет төҙөләсәк. Өлкә башҡорттары тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Әле беҙ «Башкиры Курганской области» китабы сығыуын көтәбеҙ.

Башҡортостан Республикаһы менән төҙөлгән килешеүҙе реализациялау уңышлы бара тип иҫәпләйем. Мин үҙем Президент Рәхимовтан күп нәмәләргә өйрәндем тип әйтә алам.

2000 йылдың ноябрендә Урал халыҡтары ассамблеяһы уҙғарылды — унда шул уҡ тел, мәҙәниәт проблемалары ныҡлап тикшерелде. Беҙ ҙә байтаҡ тәжрибә тупланыҡ. Әлеге көндә 2003-2007 йылдарға иҫәпләнгән һәм өлкә халыҡтарының милли-мәҙәни үҫешен күҙ уңында тотҡан яңы программа әҙерләйбеҙ. Ул документ декларатив рәүештә генә булмаясаҡ: һәр пункт өсөн яуаплы етәкселәр, үтәлеү сроктары, финанслау сығанаҡтары ентекләп күрһәтеләсәк.

Мәғариф өлкәһендә ике программаны тормошҡа ашыра башланыҡ. «Мәктәп компьютеры» программаһына ярашлы, өлкә мәктәптәренә 1000 компьютер тапшырылды. Киләһе йылда тағы ла 1000 комплект компьютер иң тәүҙә ауыл мәктәптәренә тапшырыласаҡ һәм



05.2002 Part 1.p65 55 06.06.02, 17:12

бөтә мәктәп компьютерҙарын модем аша берҙәм системаға тоташтырыу эше башланасаҡ.

Икенсе ҙур программа «Мәктәп автобусы» тип атала. Тәүге 20 автобус эшләй башланы, ә тағы ла ике йылдан программа тамамланасаҡ — балалар мәктәпкә йәйәү йөрөмәйәсәк.

Әммә ошо пландарҙы тормошҡа ашырыу өсөн өлкәнең, райондарҙың иҡтисадын тергеҙеү талап ителә. Сафакүл районының бюджетҡа һәм төрлө түләүҙәр буйынса бурысы 155 миллион һумдан артты, фермаларҙа мал ҡалманы, баҫыуҙарҙың өстән бер өлөшө һөрөлмәй. Шунан килә дөйөм деградация, енәйәтселек, эскелек. Һуңғыһына айырыуса баҫым яһарға теләр инем. 23 февралдә генә өлкәлә 12 кеше үлтерелгән. Сәбәбе — эскелек. 80-се йылдарға тиклем өлкәлә йылына 30 кеше енәйәтселек һөжүмтәһендә һәләк була ине.

Ә нисек бөгөнгө шарттарҙа эшләй башларға, кемдән өлгө алып булыу? Ҡоролтай эшендә Башҡортостандың Стәрлетамаҡ районы делегацияһы ҡатнаша. Делегация етәксеһе, район хакимиәте башлығы урынбаҫары Люция Шәйәхмәтова әйтеүенсә, уларҙа насар эшләү мөмкин түгел — шуға күрә эштәре лә көйлө бара. Ситтән, шул иҫәптән Башҡортостандан килгән ярҙамға ғына иҫәп тотоу — утопия. Сафакүл заманында бик көслө, алдынғы хужалыҡтарҙан торған район ине. Бөгөнгө маҡсатыбыҙ — дөйөм деградацияны, йәштәрҙең ситкә китеүен туҡтатып, иҡтисадты күтәреү. Ҡоролтай хәрәкәте, башҡорт халҡының милли традицияларын тергеҙеү быға булышлыҡ итә ала.

**Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министры Хәләф Хәлфетдин улы ИШМОРАТОВ:**

— Ҡәҙерле ватандаштар! Хөрмәтле Олег Алексеевич! Һеҙҙең ҡоролтай эшендә ҡатнашыуығыҙ Ҡурған өлкәһендә башҡорт халҡының теле һәм мәҙәниәте тергеҙеләсәгенә ышаныслы нығыта. Өлкә Башҡортостандан ситтә ятһа ла, бәйләнештәрҙе өҙмәйәсәкбеҙ. Ҡоролтай иһә ошо бәйләнештәрҙе яңы, юғарыраҡ кимәлгә сығарыуы менән мөһим. Ҡурған яғы — рухи потенциалы, мөмкинлектәре ҙур булған төбәк. Ул байтаҡ арҙаҡлы шәхестәр биргән, шулар араһында Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыусыларҙың береһе, һеҙҙең яҡташығыҙ Шәриф Манатовты иҫкә алыу ҙа етә.

Башҡортостан Республикаһының Халыҡ мәғарифы министрлығы һуңғы йылдарҙа Сафакүл һәм Әлмән райондарына ҙур ярҙам күрһәтә башланы. Ике район үҙәгендә лә башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеттары булдырылды. Уҡытыусыларҙың квалификацияһын күтәреү эше көйгә һалынды, дәреслектәр, уҡыу әсбаптары мәсьәләһе хәл ителеп килә.

Артабан халыҡ нисек йәшәр, милләт булараҡ һаҡланып ҡалырмы — уныһы үҙебеҙҙән тора. Бөгөн беҙ шуны әйтә алабыҙ — башҡорт халҡы милләт булараҡ ойошоп, өлгөргәнлеген күрһәтте. Ә киләсәктә милләт үҫеше нисек барыр? Йәштәребеҙ артабан да күпләп Төмәнгә, башҡа төбәктәргә китһә, проблемалар өҫтәләсәк.

Башҡортостан Республикаһы башҡорттар күпләп йәшәгән регионлардарҙы дәреслектәр менән тәьмин итеүгә бюджеттан күп аҡса бүлә, ә быйыл сумма ике тапҡырға арттырыласаҡ. Республика кадрҙар әҙерләүҙә лә Ҡурған өлкәһен иғтибар үҙәгендә тота. Әммә бүленгән квоталар тулыһынса файҙаланылмай ҡала, ошо йәһәттән өлкә башҡа регионларҙан ныҡ ҡалыша. Мәҫәлән, сәнғәт институтында Силәбе өлкәһенән 12, Төмәндән 6, ә Ҡурғандан ни бары 1 студент белем ала. Башҡа юғары уҡыу йорттарында ла шул уҡ хәл күҙәтелә. Кадрҙарҙы урындарҙа нығытыу менән дә проблемалар бар.

Башҡортостан үткән йылдарҙа танышыу маҡсатында даими рә-



05.2002 Part 1.p65 56 06.06.02, 17:12

үештә төбәккә күпләп журналдар, китаптар ебәреп торҙо. Ҡурған халҡы хәҙер Өфөлә ниндәй гәзиттәр, журналдар сыҡҡанын белә, киң информация саралары мөхите менән таныш, әммә баҫмаларға яҙылыусылар бик аҙ. Был өлкәләге мөмкинлектәрҙе тулыраҡ файҙаланырға кәрәк. Айырыуса «Ватандаш», «Ағиҙел» журналдары республиканан ситтә йәшәгән башҡорттар, ҡоролтай эшмәкәрлеге өсөн файҙалы була ала.

Урындағы башҡорт баҫмаларын үҫтереү үҙегеҙҙең әүҙемлеккә бәйле. Республика Сафакүлдә «Замандаш» гәзитенең матди-техник базаһын булдырыуҙа ҙур ярҙам күрһәтте. Компьютер биреләе, ризограф алыу өсөн 240 мең һум аҡса бүленде. Был гәзиткә тағы ла 180 мең һум бүлеү ҡаралған. Әммә ул гәзит артабан нисек йәшәр — үҙегеҙҙән тора. Баҫманы уҡыһағыҙ, уға яҙылһағыҙ — йәшәйәсәк.

Ҡурған өлкәһенең Силәбеләге вәкиллек менән тығыҙыраҡ эшләй башлауын теләр инек. Вәкиллеккә һеҙҙең төбәк менән эшләү ҙә йөкмәтелгән. Уның етәксеһе Мөхәмәтулла Хафизовҡа тәҡдимем — Ҡурғанға йышыраҡ йөрөгөҙ.

Сафакүл, Әлмән райондарының Башҡортостан Республикаһының Стәрлетамаҡ һәм башҡа райондары менән килешеүҙәр төҙөп, мәҙәни, социаль өлкәлә хеҙмәттәшлек итеүен хупларға ғына кәрәк. Республикала һәр яҡтан ҙур тәжрибә туплап өлгөргән райондар, хужалыҡтар байтаҡ. Әммә Башҡортостандың да мөмкинлектәре сикләнгән. Белеүегеҙсә, беҙ хәҙер барлыҡ килемдәрҙең 52 процентын федераль бюджетҡа күсерәбеҙ, 48 проценты ғына үҙебеҙгә ҡала. Шуға ҡарамаҫтан, республикала йәшәгән халыҡтарҙың телен, мәҙәниәтен һаҡлау өсөн күп эш эшләнә. Уҡытыу 15 телдә алып барыла, матбуғат баҫмалары 8 телдә сыға. Был бик мөһим эш — глобализация процестары халыҡтарҙың теленә, мәҙәниәтенә ҡағылырға тейеш түгел. Халыҡтарҙың милли-мәҙәни үҫеше тейешенсә тәьмин ителгәндә генә ил көслө була ала.

Хөрмәтле иптәштәр! Ҡоролтай ҡарарҙары ҡағыҙҙа ғына ҡалмаһын өсөн, уларҙы бергәләп тормошҡа ашырыу өсөн эш башлайыҡ!

**Әлмән районы башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Иҙрис Рафаил улы ӘБДЕЛВӘЛИЕВ:**

— Урындарҙа күп нәмәне кадрҙар сәйәсәте билдәләй. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларын Өфөлә әҙерләү мәсьәләһе ыңғай хәл ителеп килә. Әммә хәҙер Башҡортостан вуздарында юристар, медиктар уҡытыу мәсьәләһен күтәрә башларға ваҡыт, сөнки был өлкәләрҙә лә үҙ милли кадрҙарыбыҙ булыуы мөһим. Уҡыу йорттары төбәк менән яҡынданыраҡ танышһын өсөн, практиканттар ебәрә башлауҙы һорайбыҙ.

Башҡортостан менән тура иҡтисади бәйләнештәр булдырыу беҙҙең өсөн бик мөһим. Мәҫәлән, бензин һәм химик ашламалар беҙгә Өфөнән килә, әммә бик күп арадашсы фирмалар аша үтеп, ҡиммәткә төшә. Тура бәйләнештәр ҙур отош бирер ине. Беҙҙең Әлмән, Сафакүл өсөн күп изге эштәр эшләгән Президент Мортаза Рәхимовҡа, Премьер-министр урынбаҫары Хәләф Ишморатовҡа, Өфө күҙ ауырыуҙары институты директоры академик Марат Аҙнабаевҡа, Башҡортостандан даими килеп йөрөгән, беҙҙе онотмаған милләттәштәргә яҡташтарым исеменән ҙур рәхмәт белдерергә теләр инем...

Ҡоролтай үҙ эшен Башҡарма комитеттың яңы составын һәм рәйесен һайлау менән тамамланы. Ҡурған өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһына Сафакүл районы хакимиәтенең ер эштәре буйынса комитеты рәйесе **Мөхәррәм Йомағужа улы Динмөхәмәтов** һайланды.

Ҡоролтайҙа ҡайһы бер делегаттарҙан блиц-интервью алырға ла



05.2002 Part 1.p65 57 06.06.02, 17:12



*Королтай Башҡарма комитеты рәйесе Мөхәррәм Йомағужа улы Динмөхәмәтов*

тура килде. Уларҙың икеһен «Ватандаш» уҡыусылары иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.

**«Замандаш» гәзите мөхәррире Ғәбдинур Әбделхәй улы МӘҮЛӘҮИЛОВ:**

— Беҙҙең баҫма 2000 йылдың октябренән башлап сыға. 10500 дана тираж менән баҫылып, әлегә бушлай таратыла. Баҫманың ойоштороу таныҡлығы ғына бар, уставы теркәлеү үтмәгән. Журналистар коллективы ла юҡ — гәзитте сығарыуҙа «Трудовая слава» район гәзите редакцияһы ярҙам күрһәтә, набор һәм версткаһы улар эшләй.

Ошо ауыр хәлдән сығыу өсөн 2001 йылдың июнендә махсус «Замандаш» фонды астыҡ. Унда Башҡортостан Президенты Мортаза Рәхимов 240 мең һум күсерҙе — ул аҡсаға ризограф алдыҡ. Ошо техник базала гәзитте сығарыу мөмкин, тик уның өсөн тәүҙә бер тәржемәсе, бер компьютерҙа йыйыусы, бер верстка операторы штат бирәмеге, тотороҡло финанслау сығанағы кәрәк. Артабан, редакция бухгалтерһыҙ ҙа мөмкин түгел. Ҡыҫҡаһы, ҙур гәзит сығарыу өсөн нимә кәрәк — бәләкәй гәзит өсөн дә шуларҙың бөтәһе лә кәрәк. Ә «Замандаш» иһә өлкә гәзите статусына дәғүә итә, шуға күрә уны «бәләкәй баҫма» тип ҡабул итеү дөрөҫ түгел. Ниәт — тәүҙә ике-өс йыл баҫманы бушлай таратыу, халыҡты таныштырыу. Беҙҙең шарттарҙа был бик мөһим, сөнки 60-сы йылдарҙың башынан алып башҡорт теле бөтөнләй уҡытылманы. Ярты быуат дауамында халыҡ милли-мәҙәни мөхиттән бөтөнләй ситләшеп бөттө. Милли мәҙәниәттән фольклор төркөмдәре генә һаҡланғайны бит. Улар 1991 йылда Өфөгә фольклор байрамына ла барып ҡайтҡайны, унан һуң ул төркөмдәр ҙә тарҡалып бөттө — өлкән быуын олоғайып, китеп тора бит, ә йәштәр менән икенсе төрләрәк, заманса алымдар ҡулланып эшләргә кәрәк. Мәҫәлән, «Каруанһарай» һымаҡ музыкаль төркөмдәр ойоштороуҙа ярҙам күрһәтеп. Беҙҙең «Замандаш» гәзите лә Өфөнөң ярҙамынан тыш аяҡҡа баҫа алмаясаҡ. Күреүегеҙсә, бөтәһе лә беҙҙең энтузиазмға ғына нигеҙләнә әлегә. Өлкә бюджетынан 2002 йылға редакцияға 27 мең һум ғына бүленде — ул аҡса ҡағыҙға ла етмәй, әлбиттә.

Ҡурған өлкәһендә хәлле генә йәшәгән диаспоралар ҙа бар. Мәҫәлән, Боровичи ауылында немецтар йәшәй. Ундағы мәктәп Немец мәҙәниәте үҙәге функцияһын да үтәй. Быйыл Германия хөкүмәте ул мәктәпкә 40 млн һум аҡса бүлде. Немецтарҙың тәжрибәһе, бәлки, беҙҙең өсөн дә файҙалы булыр. Әлбиттә, хәҙерге заманда бөтәһе лә финанслауға барып терәлә...

**Аҙналы төп урта белем биреү мәктәбе директоры Рәмзиә Шәрифйән ҡыҙы МУСИНА:**

— Беҙ үҙебеҙҙең мәктәптә Башҡорт мәҙәниәте үҙәге функцияларын да үтәй алырлыҡ кимәлгә күтәрергә ниәтләйбеҙ. Районда ундай ыңғай тәжрибә бар. Боровичи ауылынан немецтар Германияға күсеп бөтөп барһа ла, Берлин унда йыл һайын күп аҡса ебәреп тора. Мәктәптә, ундағы Немец мәҙәниәте үҙәгендә методикалар бик шәп эшләнгән. Беҙҙә методика аҡһай. Финанслау етмәй. Башҡортостандан килгән 60 мең



05.2002 Part 1.p65 58 06.06.02, 17:12

һумлыҡ ярҙамды музейҙы ремонтлауға тотондоҡ. Рәхмәт Башҡортостандың мәғариф министры Ғәлиә Мөхәмәтйәноваға — беҙҙең хәлде аңлай.

Киләсәктә мәктәбебеҙҙе тулы урта мәктәп итеп үҙгәртергә ниәтләйбеҙ. Быға биш йыл ваҡыт кәрәк. Әлегә кадрҙар етешмәй. Сығымдар ҙа байтаҡ талап ителәсәк. Мәктәпкә ремонт кәрәк. Әле йылытыу системаһын ремонтланыҡ, үҙ көсөбөҙ менән түбәне төҙәттек — ташландыҡ ферманан иҫке шифер ташып, оҙаҡ ҡына хитландыҡ...

Әңгәмә ваҡытында сафакүлдәр экология проблемаларына ла йыш ҡағылды. Уларҙы иң борсоғаны — Щучье ҡалаһында химик ҡоралды юҡ итеү заводы төҙөлөүе. Предприятие Сафакүлдән 30 километр алыҫлыҡта ғына урынлашҡан. Был турала Мәскәү телевидение каналдары ла борсолоп хәбәр иткәйне. Заводты төҙөүҙе Америка Ҡушма Штаттары тулыһынса үҙ өҫтөнә алған һәм, Ҡурғанда сыҡҡан «Новый мир» гәзите (27 февраль һаны) хәбәр итеүенсә, 35 миллион доллар аҡса бүленгән. Завод бер-нисә йыл элек төҙөлә башлап, эргәһендә Плановый поселогы ҡалҡып сыҡҡайны. Төҙөлөш туҡтатылып торҙо, әммә завод һаҡлағыстарына химик һәм радиоактив материалдар ташыу туҡтатылманы. Эш туҡталыуҙың сәбәбе — Американан быға тиклем килгән аҡсаның Рәсәй оборона министрлығында «юғалыуында». Ошо тәртипһеҙлектәргә ҡарамаҫтан, американлылар эште тиҙләтергә тырыша. Плановый хәҙер ҙур, матур коттеджлар ҡаласығына әйләнеп, АҠШ-тағы ваҡ ҡалаларға оҡшап тора. Сафакүлдән дә байтаҡ йәштәр шунда йәшәй һәм эшләй, күптәр вахта менән йөрөй. Төбәктә онкологик ауырыуҙар кимәле арта, әммә был хәл береһен дә борсомай. Сафакүлдәр шаяртып: «Уның ҡарауы, Плановыйҙа картуф һәйбәт үҫә — бөтә колорадо ҡуңыҙҙары үлеп бөткән», — тип өҫтәй. Әсе ирония менән, әлбиттә.

Сафакүлдә эсәр һыуҙың бик тоҙло булыуына ла иғтибар итәһең. Ҡайһы бер ауылдарҙа, эргәлә ҙур күлдәр бихисап булһа ла, һыуҙы ситтән ташыйҙар. Урмандар ҡалмағас, күп күлдәр тоҙло һаҙлыҡтарға әйләнә. «Ҡайындар иле утынды ситтән ташый, күлдәр иле ҡышын ҡар иретеп эсә хәҙер», тиҙәр бында. Шуларға өҫтәп, бейеклеге ике метрға етеп барған ҡайындар баҫҡан ташландыҡ баҫыуҙарҙы күҙ алдына килтерһәң... Әммә был проблемаларға ла күҙ йомоу килешмәҫ — миләттәштәребеҙ алдында принципһыҙлыҡ булыр ине. Сафакүлдәр II Бөтә донъя башҡорттары ҡорол-





05.2002 Part 1.p65 59 06.06.02, 17:12

тайы резолюцияһында тарихи, йәғни Оло Башҡортостан ерҙәрендә, әле лә башҡорт халҡы күпләп йәшәгән төбәктәрҙә атом объекттары, атом һәм химик ҡорал, ҡалдыҡтар һаҡлағыстары шыплап тултырылыуына, хәҙер унда Көнбайыш Европанан да радиоактив ҡалдыҡтар ташылыуына баҫым яһаған пунктты күрергә теләр ине. Сафакүл 1957 йылғы «Маяҡ» фажиғәһе зонаһына инһә лә, төбәктә йәшәгән халыҡҡа компенсация килеп етмәй. Федераль бюджеттан был маҡсатҡа ифрат ҙур сумма — 8,7 миллиард һум бүленгән булһа ла, зарарланған территорияларҙа йәшәгән 1,7 миллион кеше уның файҙаһын күрмәй. Киреһенсә, хәүеф йылдан-йыл арта ғына...

**Делегация составында булған ғалим-филолог Салауат Әхмәҙи улы ҒӘЛИН Сафакүлгә инде күптән йөрөй һәм төбәктәге хәлдәр тураһында ошоларҙы һөйләй:**

— Мин Ҡурған өлкәһенә 1959 йылдан башлап йөрөйөм. Кирәй Мәргән ағайҙар менән фольклор экспедицияһы составында барғайныҡ. Ул саҡта Сафакүлдә һәм Әлмәндә эштәр бик көйлө ине: халыҡтың күңеле көр, бөтә ерҙә төҙөлөш бара, балалар мәктәптәрҙә башҡортса уҡый. Шунан ошо көйлө тормошто юҡҡа сығара башланылар. Районлар бөтөрөлдө, мәктәптәрҙә уҡытыу урыҫ теленә күсерелде. Әлбиттә, барыһы ла Мәскәү күрһәтмәһе буйынса эшләнде. Уға тиклем районларҙа РОНО, мәҙәниәт бүлектәре бар ине, улар Башҡортостан менән нығыу бәйләнеш булдырғайны. Кадрҙар, дәреслектәр, методик әҙәбиәт һәм башҡаһы — барыһы ла Өфөнән ебәрелә ине. Ҡапыл бөтәһен бер көндә, 1962 йылғы ҡарар сығарып, бөтөрҙөләр. Ә Сафакүл һәм Әлмән районлары башҡорттары, башҡорт мәктәптәре, милли мәҙәниәт проблемалары менән артабан кем, нисек шөғөлләнәсәк тип һорағас, ошо — ғәмәлдә этноцид акцияһы менән етәкселек иткән юғары вазифалы түрәләрҙең береһе бер генә һүҙ әйтеп, «команда» бирә: «Кончать их!» Мәктәптәрҙә уҡытыусылар китаптарҙы йыйып, һаҡлап алып ҡалырға тырыша, әммә етәкселәр, милиция килеп, башҡорт телендәге бөтә китапты йыйып яндыралар. Енәйәт 1965 йылдың март айына тиклем дауам итә. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Сафакүл, Әлмән башҡорттарының мәғариф һәм мәҙәниәт системаһы юҡ ителә һәм унан һуң аяҡҡа баҫа алмай.

1998 йылда мин унда бер йыл буйына булып, уҡытыу методикаларын тергеҙеүҙә ҡатнаштым. Эште юҡҡа сығарыу, емереү бик еңел икән, ә бына тергеҙеүе... Ошо эшкә тотонған зыялыларыбыҙға Хоҙай көс, түҙемлек бирһен инде.

Мин Сафакүл менән Әлмәнгә барып ҡайтһам, аҙна-ун көн йоҡлай алмай йөҙөйөм, ундағы халыҡтың яҙмышы тураһында уйланам. Бөтәһе лә минең күҙ алдында булды бит. Шулай ҙа һуңғы йылдарҙағы үҙгәрештәрҙе күреп, бик ҡыуанам. Әлбиттә, әлеге хәлде 70-се йылдарҙағы менән сағыштырырлыҡ та түгел — ыңғай үҙгәрештәр бик күп. Әммә 1959 йылғы, мәҙәниәт һәм мәғариф йәһәтенән Сафакүл һәм Әлмән Башҡортостан менән бер бөтөндө тәшкил иткән осор кимәленә етмәгәнбеҙ әле...

Ҡоролтай тамамланып, хушлашҡан мәлдә Башҡортостан делегацияһы етәксеһе Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов тулҡынлана төшөп: «Кешеләрегеҙҙең күҙҙәрендә йылылыҡ, өмөт осҡондары күрҙем, шуға бик шатмын. Тимәк, уларҙың киләсәгенә ышаныс бар!» — тине. «Килеп дан иттегеҙ!» тип ҡалған милләттәштәребеҙҙең иһә әлегә бөтә ышанысы беҙҙә, Башҡортостанда.

*Закир Шакиров әҙерләне.*
*Юлай Кәримов фотолары.*



05.2002 Part 1.p65 60 06.06.02, 17:12